**Приложение №1 к Рабочей программе**

**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**
Министерство образования и науки Республики Башкортостан
Администрация муниципального района Чекмагушевский район Республики Башкортостан
МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Методическим объединением учителей | Заместитель директора по УВР | Директор МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш |
| __________Саляхова Р.А. | ___________ Давлетова В.В. | _______ Бикмухаметов А.Р. |
| Протокол №1 | Протокол № 1 | Приказ № 29 |
| от "22" 07 2023 г. | от "22" 07 2023 г. | от "22" 07 2023 г. |

Для документов МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш МР

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш

# КОНТРОЛЬНО-ИЗМЕРИТЕЛЬНЫЕ МАТЕРИАЛЫ

**по предмету**
**“Родной (башкирский) язык”**
**на уровень основного общего образования**

с.Чекмагуш, 2023

**5-се класс**

Күсереп яҙыу.

Көҙгө урман.

Көҙгө урманда йөрөргә яратам. Унын иң матур сағы сентябрь булалыр. Зәңгәр күккә, йылы аяҙ көнгә, урмандың төрлө биҙәктәренә һоҡланып туя алмаҫһың. Тәрән тынлыҡ. Әкрен генә ел иҫә. Ағастарҙан япраҡтарҙың ҡойолғаны ишетелеп ҡуя.

II сиреккә контроль диктант.

Шыршы турғайҙары.

Һеҙҙең ҡыш көнө урманда булғанығыҙ бармы? Йәмле лә һуң ҡышҡы урман! Айырыуса шыршы һәм ҡарағайҙар күркәм булалар. Уларҙың ботаҡтарында матур булып ҡар ята. Бейек шыршыларҙың ботаҡтарында оялар күргәнегеҙ бармы? Унда шыршы турғайҙары оя яһайҙар. Улар сатлама һыуыҡтарҙа ла геү килеп уйнайҙар. Шыршы турғайҙары шыршы тубырсыҡтарының орлоғон ашайҙар. Улар ҡыш көнө бала сығаралар. (54 һүҙ.)

Бирем: күплектә килгән исемдәрҙең аҫтына һыҙырға, *оя* һүҙенең өндәр, хәрефтәр һанын билдәләргә.

III сиреккә контроль диктант.

Яңғыҙ ҡайын.

Бына, көтә торғас, көндәр ҙә йылына башланы. Ҡарҙар иреп, һыуҙар ташты. Ҡайынға ла йән инде. Тамырҙан күтәрелгән татлы һуттан һәр бөрөһө хәрәкәткә килде. Ҡайын бер кемдән дә бөрөрөһөн йәлләмәне: улар бик файҙалы бит. Көндәр үтә торҙо. Ҡайын аҡ зифа буйлы, йәшел күлдәкле күркәм ағасҡа әйләнде.

Бирем: сифаттарға һыҙырға.

IV сиреккә контроль диктант.

Ялда.

Көн кискә ыңғайланы. Күлдә бер тулҡын әҫәре лә юҡ. Балыҡ ҡаптырыр өсөн иң уңайлы ваҡыт. Күл эсендә төрлө-төрлө урында ете-һигеҙ кәмә күренә. Кәмәләргә таш бәйләп, якорь һалып ҡуйғандар. Балыҡсылар балыҡты һыуҙан тартып сығарып ҡына торалар. Ҡармаҡҡа алабуғалар, эре-эре сабаҡтар эләгә. Күл ситендә усаҡтар яна. Ҡатын-ҡыҙҙар балыҡ һурпаһы бешерәләр.

Бирем: исемдәргә һыҙырға.

Изложение.

Әсә.

Минең донъяла башлап күргән нәмәм,башлап тойған нәмәм-әсәйемдең йөҙө, унын йыры. Әсә йыры-донъялағы иң матур йыр. Ҡалған башҡа йырҙар ҙа шул йырҙан башлана. Әгәр ҙә сәңгелдәк йыры булмаһа, моғайын, башҡа йырҙар ҙа булмаҫ ине. Ул ваҡытта донъялағы бәхетте лә, шатлыҡты ла кеше тулыһынса аңламаҫ ине. Беҙ әсә йырын оҙаҡ йылдар үткәс тә иҫкә төшөрәбеҙ. Тормошобоҙҙоң ауыр һәм бәхетле көндәрендә лә әсәй йыры беҙҙең менән.

Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.

Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

-теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп

Демо- … МБОУ СОШ №1 … Магуш

фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы айлай белеүе,
-яҙғанда, грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла. Беренсе билдә менән уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

| Баһаларҙың төп критерийҙары | | |
|---|---|---|
| Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө | Грамоталылыҡ | Баһалау |
| 1. Яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,<br>2. Фактик хата булмаһа,<br>3. Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),<br>4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа,<br>5. Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа,<br>Иҫкәрмә. Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 1 орфографик,йәки 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк, бөтәһе 1 генә хата) булһа | «5» билдәһе ҡуйыла |
| 1.Эштең йөкмәткеһе,нигеҙҙә,темаға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),<br>2.Йөкмәтке, нигеҙҙә, дөрөҫ бирелһә, әммә эштә бик аҙ булһа ла, фактик хаталар осраһа,<br>3.Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,<br>-яҙма эш,нигеҙҙә,синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик формаларға бай булһа,<br>-эш бер төрлө стилдә яҙылыуы һәм тасуири булыуы менән айырылып торһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштең телмәр хаталары өҫтөндә, йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа, уға «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион хата булһа, йәки бер орфографик хатаһы ла булмайынса, пунктуацион хаталары 4-тән һәм грамматик хаталары 2-нән артмаһа, | «4»билдәһе ҡуйыла |
| 1. Яҙма эштә теманы ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,<br>2. Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,<br>-айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,<br>-яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙе ҡулланыуға хаталар булһа,<br>-эш тема һәм уны аңлатыу (асыу) талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа, | Яҙма эштә 4 орфографик һәм 4 пунктуацион хата, йәки 3 орфографик һәм 5 пунктуацион хата, йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа, шулар өҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә, | «3» билдәһе ҡуйыла |

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

| | | |
|---|---|---|
| Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 5-тән, йөкмәткеләге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә, эшкә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | | |
| 1. Яҙма эш темаға тура килмәһә,<br>-фактик хаталар күп булһа,<br>-эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа, текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа, планға ярашһыҙ булһа,<br>1.Һүҙлеге ғәҙәттән тыш ярлы булһа, эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкциялы ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән торһа һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталар осраһа,<br>-эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 7-нән, йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә лә, уға «2» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Орфографик хаталары 7-нән, пунктуацион хаталары 7-нән , грамматик хаталары 7-нән артһа, | «2» билдәһе ҡуйыла |

Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйғанҡатмарлыпунктуацияғахаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).* йә, йө, йү, йе ҡушымталарының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәплəгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.
Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
Диктант бер генә билдә менән баһалана.
«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион, йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, айырым баһалана.

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

Сәләмәтлеге сикләнгән һәм башҡорт телен насар белгән уҡыусыларға контроль күсереп яҙыу өсөн текстар.

Көҙгө урман.

Көҙгө урманда йөрөргә яратам. Унын иң матур сағы сентябрь булалыр. Зәңгәр күккә, йылы аяҙ көнгә, урмандың төрлө биҙәктәренә һоҡланып туя алмаҫһың.

Бирем:

Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәренә һыҙырға.

Ҡарағай ағасы.

Ҡарағай йәй ҙә, ҡыш та йәшел була. Ул бик файҙалы ағас. Ылыҫы витаминдарға бай. Бөрөһөнән дарыуҙар эшләйҙәр. Бүрәнәһенән йорттар һалалар. Ҡарағайҙан скрипка ла яһайҙар. Ул иң яҡшы скрипка булып һанала.

Бирем:

Тартынҡыларға һыҙырға.

Баш ҡала.

Өфө –Башҡортостандың баш ҡалаһы. Эргәһендә Ағиҙел йылғаһы аға. Уға Дим һәм Ҡариҙел йылғалары ҡушыла. Ҡаланың киң урамдарында трамвайҙар, троллейбустар һәм автобустар йөрөй.

Баш ҡалабыҙ йылдан-йыл матурлана һәм йәмләнә бара.

Биремдәр:

1.Һуҙынҡы өндәрҙең аҫтына һыҙырға.

2.Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп алырға.

Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.

Контроль эштәрҙе тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйғанҡатмарлыпунктуацияғахаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).* йә, йө, йү, йе ҡушымталарының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.

Эшкә билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Эш бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар

Демо-версия МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион, йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
Әгәр өҫтәмә эштәр тәҡдим ителһә, айырым баһалана.
Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

## 6-сы класс

Контроль диктант “Башҡортостан нефте”.

Ғалимдар Башҡортостанда нефть булыуын күптән тоҫмаллағандар. Элекке байҙар бик күп тапҡыр ерҙе быраулатып ҡарағандар, ләкин нефть табылмаған. Улар нефтькә барып етә алмағандар, сөнки тәбиғәт уны бик тәрән йәшергән.

Башҡортостанда 1931 йылда быраулау эштәре башлана. Һәм 1932 йылда тәүге нефть фонтаны урғыла башлай. Нефть иң тәүҙә Ишембай ауылы янында сығарыла һәм был бәләкәй генә ауыл, ваҡыт үтеү менән нефтселәр ҡалаһына әйләнә. *(«Шоңҡар» гәзитенән.)*
Бирем: күплектә килгән исемдәрҙең аҫтына һыҙырға, *ауылы* һүҙенең затын билдәләргә.

Контроль диктант “Балыҡсылар”.

Ҡамыштар араһынан кәмә ярға килеп төртөлдө.Ғабдулла менән Айҙар сисенеп мурҙа эргәһенә ашыҡтылар.Ул тап үҙ урынында тора.Тукта,тукта! Мурҙа тирәһендә ҡамыштар һелкенә түгелме? Малайҙар мурҙаны күтәреп алдылар. Ниндәй тамаша был? Мурҙа эсендә эре-эре сабаҡтар, ҡыҙылғанаттар, алабуғалар сәпелдәшеп ята. Ун биш-егерме баш булыр. Нисек ингәндәр улар? Бына һиңә мәрәкә! Мурҙаның ауыҙы нәк элек ябып киткәнсә тора. Тимәк, был эште ниндәйҙер әҙәм ҡулы эшләгән.
Ауҙан балыҡ сәлдерәү ғәҙәте булған ул элек ,әммә сит мурҙаға балыҡ килтереп һалған кешене малайҙар күргәндәре лә,ишеткәндәре лә юҡ әле. Бөркөтләлә быңдай хәл булғанын хәтерләүсе табылмаҫ. Әҙәм ышанмаҫлыҡ мәрәкә был! (М. Кәримдән).

Бирем: *Ун биш-егерме* һанының төркөмсәһен;
2)*Бөркөтләлә* һүҙенең килешен билдәләргә.

Мөмкинселектәре сикләнгән уҡыусыларға контроль күсереп яҙыу өсөн текстар.

Файҙалы үтһен ялың!

Йәй минең иң яратҡан миҙгелем. Бөтә ер иҫ киткес матурлыҡҡа төрөнә. Урманға барһаң, серле тәбиғәт донъяһы асыла. Унда ниндәй генә сәскәләр, үләндәр үҫмәй, ниндәй генә ҡоштар һайрамай.
Йәй матур, әлбиттә. Ләкин мин матурлыҡҡа һоҡланып ҡына йөрөмәйем. Каникулымды файҙалы үткәрергә тырышам. Әҙәби китаптар, газета-журналдар уҡыйым.
Йәй көнө мин әсәйемә ярҙам итергә тырышам: өй йыйыштырам, баҡсала емеш - еләккә һыу ҡоям, утайым; ҡоймаҡ ҡоям, торт бешерәм. (65 һүҙ.)

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш

Бирем:беренсе һөйләмдәге исемдәрзең аҫтына һыҙырға.

Атом боҙватҡысы.

Беҙҙең илебеҙҙә эшләгән тәүге боҙватҡыс 1959 йылда һыуға төшөрөлдө.Шунан бирле 30 -ҙан артыҡ йыл эсендә ул әллә күпме юл уҙҙы.

Боҙватҡыс бик ҡеүәтле. Унын көсө сит ил боҙватҡыстарына ҡарағанда ике-өс тапҡырға артығыраҡ. Яғыулыҡ запасы ла бер йылға етәрлек. Боҙватҡыстың энергетик базаһы йөҙәр мең кешеле бер нисә ҡаланы электр көсө менән тәьмин итә алыр ине.

Боҙватҡыста хеҙмәт итеүсе кешеләр өсөн бөтә уңайлы шарттар тыуҙырылған.Унда телефон станцияһы һәм радиостанция эшләй. Бына ниндәй ул атом боҙватҡысы!

Бирем: составында ө өнө булған һүҙҙәрҙе яҙығыҙ.

Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).* йә,йө, йү,йе ҡушымталарының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәплəгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион, йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш

**7-се класс**

ӘРЕМ – 1 сирек

Әрем бөтә ерҙә үҫә: һөрөп ҡалдырылған ерҙә, туһайҙа, көтөүлектәрҙә, хатта иген баҫыуында ла. Беҙҙең Урал алды һәм Урал аръяғы ерҙәрен унһыҙ
күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Әрем — күп йыллыҡ, бейек булып үҫә торған үлән. Тамыры ағастыҡы кеүек йыуан, шуға әрем көслө елгә бирешмәй. Сәскәләре бик бәләкәй, хатта лупа аша ҡарағанда ла насар күренә. Улар борсаҡ-борсаҡ булып бер урында ойошоп торалар. Был үҫемлектең япраҡтары, сәскәләре үтә әсе була. Әремдән төрлө дарыуҙар эшләйҙәр. (75 һүҙ.) («Совет Башҡортостаны» гәзитенән.)

ЯНҒАНТАУ. - 2 сирек

Республикабыҙҙың Салауат районында Янғантау шифаханаһы урынлашҡан.
Унда ер аҫтынан бер туктауһыҙ эҫе пар һәм газ сығып ята. Тау 200 йылдан ашыу ғалимдарҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итә, ләкин әлегә тиклем уның сере асылғаны юҡ. Янғантау шифаханаһында бгуын ауырыуҙарын дауалайҙар. Тау янында Ҡорғаҙаҡ йылғаһы аға. Был шишмә ҡышын да туңмай. Ундағы һыуҙың температураһы йыл әйләнәһенә 16—18 градус була. Һыуы шифалы: ашҡаҙан-эсәк һәм бөйөр ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланыла. (66 һүҙ.) (Мәктәп календарынан.)

ШӘЖӘРӘ -3сирек

Шәжәрә — ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр исеме генә индерелгән һәм уларҙы иҫтә тотоу талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән.
Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик борондан һаҡланып килгән, әлек 7 быуыныңды белеү ғәҙәти хәл булған. Хатта ата-бабаларын 10—12 быуынға тиклем белеүселәр бар.
Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте бик ҙур. (68 һүҙ.) (Мәктәп календарынан.)

Контроль диктант. – 4 сирек

Июнь — йылдың иң матур айы. Болон, туғайҙар гөрләп сәскә ата. Был айҙа Өфө ҡалаһына яҡын аҡландарҙа 40-тан ашыу сәскә төрөн күрергә мөмкин.
Йылға, күлдәр өҫтөн ап-аҡ һәм һап-һары томбойоҡ сәскәләре ҡаплай.
Май, июнь — ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты. Улар балаларына ашарға ташып бер була. Мәҫәлән, бәләкәй генә себен сәпсеге тәүлегенә 560 тапҡыр осоп, аҙыҡ килтерә.
Июндә күбәләктәр оса. Бал ҡорто күс айыра.
Июнь — тәүге еләктәр айы. Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә.
22 июнь — йыл эсендә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн. Бер нисә көн шулай тигеҙ тора, шунан йәйге көн ҡыҫҡара башлай.

**Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.**

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).* йә,йө, йү,йе ҡушымталарының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.
«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион, йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**8-се класс**

*Контроль диктант яҙыу өсөн текстар.*

**Рәхмәт хаты.**

Синыф етәксеһе һүҙен дауам итте:
- Вәсил хаҡында бына бер ҡыуаныслы хат килде. Һеҙгә уҡыйым әле.

Закира Шакировна хатты уҡый башланы:
- Хөрмәтле директор Афзалов иптәш! Һеҙгә күп сәләмдәр ебәреп хат яҙа пенсионерка Мәхмүтова. Ауырыған саҡта миңә һеҙҙең уҡыусығыҙ Ғәлиев Вәсил ҙур ярҙам итте һәм иғтибар күрһәтте. Минең мал-тыуарымды ҡараны, төрлө йомоштарыма йөрөнө. Шундай һәйбәт, егәрле уҡыусы тәрбиәләгәнегеҙ өсөн һеҙгә, уҡытыусыларға ҙур рәхмәтемде белдерәм. Минең рәхмәт һүҙҙәремде унын ата-әсәһенә лә еткерһәгеҙ икән. Вәсилдең үҙенә ҙур уңыштар теләйем. Һәр саҡ шулай кеселекле, ярҙамсыл булып ҡалһын.

*Өҫтәлмә эштәр: 1) Һуңғы өс һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәләргә ,*
*2) Текстан сифаттарҙы яҙып алырға.*

**Балет**

Балет спектаклдәре тәүге тапҡыр Францияла ҡуйыла. 1581йылдың 5 октябрендә Париж ҡалаһы сәхнәләренең береһендә сәнғәттең яңы төрө – балет күрһәтелә. Балет – бейеп башҡарылған спектакль ул. Бейеү менән моңло көй аша тамашасы спектаклде һүҙһеҙ ҙә аңлай. Балет спектаклен ижад иткәндә башта либретто яҙалар. Ошо либреттоға нигеҙләнеп, композитор көй ижад итә. Ә балетмейстер бейеүҙе көйгә һала. Балет артистары уларҙың хеҙмәтен тамашасыға еткерә. Бына шулай балет спектакле тыуа.

Башҡортостанда тәүге балет 1954 йылда ижад ителә. Шунан һуң бер-бер артлы балет спектаклдәре ҡуйыла башлай.

*Өҫтәлмә эштәр: текстағы яңғыҙлыҡ исемдәрҙе билдәләргә.*

Демо-версия МБОУ СОШ №1 с. Некматуш

**Ҡош юлы.**

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла яралмаған, ти. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Урал тауы, Һаҡмар, Ағиҙел йылғалары буйҙарына торналар килеп йәйләр булған.

Бер йылды торналар йылы яҡҡа осҡан ваҡытта, ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша, ҡайһылары арып, ергә төшә башлаған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн, ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән. Улар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар барлыҡҡа килгән. Рустар Ҡош юлын Млечный путь тип атаған.

*Өҫтәлмә эштәр:биш исемде табып, килешен билдәләргә.*

**Салауат Юлаев- башҡорт халҡының милли батыры.**

Башҡорт халҡының милли геройы һәм шағиры Салауат Юлаев 1754 йылда Башҡортостандың Салауат районы Тәкәй ауылында старшина ғаиләһендә тыуған. Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин аҡыллы һәм заманына күрә уҡымышлы кеше булған. Тыуған ерен, халҡын аяуһыҙ талауға йәне әсегән старшина әленән-әле тоҡанып торған восстаниеларҙа ҡатнаша килгән.

Салауат та үҙен үҫмер саҡтан ҡурҡыу белмәҫ, сая рухлы батыр итеп таныта. 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында Салауат Юлаев Емельян Пугачёвтың иң яҡын ярҙамсыларының береһе була. Ул үҙенең ялҡынлы телмәрҙәре, сәсән теле менән иҙелгән, йәберләнгән халҡын ер-һыу, азатлыҡ өсөн көрәшкә әйҙәй. Батырҙың һүҙҙәре, өндәмәләре телдән телгә, күңелдән күңелгә күсә.

1774 йылда Салауат ҡулға алына, вәхшиҙәрсә язаланғандан һуң, уны атаһы менән бергә Фин ҡултыгындагы Рогервик (хәҙер Эстониялагы Палдиски) ҡалаһына ғүмерлек каторгага ебәрәләр. Салауат батыр 1800 йылдың сентябрендә вафат була.

*Өҫтәлмә эштәр: һандарҙы һүҙҙәр менән яҙырға.*

**Мөмкинселектәре сикләнгән һәм башкорт телен насар белгән укыусыларға контроль күсереп яҙыу өсөн текстар.**

**Башҡортостан.**

Башҡортостан – бик бай ил. Унда нимәләр генә юҡ! Аҡ бүрекле тауҙар ҙа, ҡылғанлы киң яландар ҙа, көмөш һыулы йылғалар ҙа, зәңгәр күлдәр ҙә, икһеҙ-сикһеҙ урмандар ҙа күп бында.

Без йәшәгән ерҙең ҡуйынындағы байлыҡтарҙы һанап бөткөһөҙ. Нефть һәм газ тиһеңме, күмер һәм металл тиһеңме, алтын һәм баҡыр тиһеңме – бөтәһе лә бар был ерҙәрҙә.

Шулай уҡ ҡиммәтле тиреле хайуандары, иҫ киткес балы менән дан ҡаҙанған Башҡортостан.

**Халҡыбыҙ йолалары.**

Башҡорт халҡы ҡунаҡтарҙы эсемлек – ҡымыҙ, буҙа, айран менән ҡаршылаған. Һуңғы йылдарҙа икмәк өҫтөнә тоҙ ҡуйып ҡаршы алыу киң таралды. Был – халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаһына ҡаршы килеү.

Урындыҡҡа балаҫты ҡаплап йәйеү башҡорт ғәҙәтендә булмаған. Башҡорттар урындыктың йөҙлөгөн һырлап-семәрләп яһағандар ҙа балаҫты йәки кейеҙҙе шул йөҙлөк күренеп ятырлыҡ итеп кенә йәйгәндәр.

**Салауат Юлаев- башҡорт халҡының милли батыры.**

Башҡорт халҡының милли геройы һәм шағиры Салауат Юлаев 1754 йылда Башҡортостандың Салауат районы Тәкәй ауылында старшина ғаиләһендә тыуған. Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин аҡыллы һәм заманына күрә уҡымышлы кеше булған.

Демо-версия. МБОУ

Тыуған ерен, халҡын аяуһыҙ талауға йәне әсегән старшина әленән-әле тоҡанып торған восстаниеларҙа ҡатнаша килгән.

Салауат та үҙен үҫмер саҡтан ҡурҡыу белмәҫ, сая рухлы батыр итеп таныта. 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышында Салауат Юлаев Емельян Пугачёвтың иң яҡын ярҙамсыларының береһе була. Ул үҙенең ялҡынлы телмәрҙәре, сәсән теле менән иҙелгән, йәберләнгән халҡын ер-һыу, азатлыҡ өсөн көрәшкә әйҙәй. Батырҙың һүҙҙәре, өндәмәләре телдән телгә, күңелдән күңелгә күсә.

## Контроль эштәрҙе баһалау системаһы

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша*); йы, йә, йө, йо, йү, йе ҡушымсаларының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең һәм ялғауҙарының яҙылышына хаталар.

Бер типтағы хаталарҙы һәм бер ҡағиҙәгә ҡараған хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

“5” билдәһе – 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

“4” билдәһе – 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик эшкә лә “4” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“3” билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә “3” билдәһе ҡуйырға мөмкин.

“2” билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

Контроль күсереп яҙыу эшен баһалау:
“5”- хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа
“4”- бер хата һәм бер төҙәтеү
“3”- ике хата һәм бер төҙәтеү

## 9-сы класс

### *Көҙгө урман.*

Мин көҙгө урманда йөрөргә яратам.Уның иң гүзәл сағы сентябрь бөткәндә,октябрь баштарында булалыр.Үрмәксе ауҙары иренеп кенә йөҙгән зәңгәр күккә,йылы аяҙ көнгә,урмандың төрлө биҙәк хазинаһына һоҡланып туя алмайһың.Тәрән тынлыҡ.Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡтар иркәләй.Ә ағастар? Ниндәйҙер оло ҡарағай йәки имән ышығында үҙенең ҡыҙыллы-һарылы сыбар кейемендә йәш саған ҡупшыланып ултыра.Тағы сыбар биҙәкле япраҡтарға һарыҡҡан асыҡ ҡыҙыл емештәре

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

менән ҡыштырлап миләш тора.Уҫаҡтың уҫағына тиклем:”Ҡарағыҙ,мин бына ниндәй!”-тигән һымаҡ,йәйғор буяуҙары менән күҙҙәрҙе ҡамаштыра.

Көҙгө урмандың гүзәллегенә күңелеңде рәхәтләндереп йөрөй бирәһең дә кескәй аҡланға килеп сығаһың, уның тәрән тынлығын тыңларға ултыраһың. Шунда татлы хыялдарға күмелеп киткәнеңде үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың.(Д.Исламов.)

*Өҫтәмә эш: Текстың икенсе абзацындағы сифаттарҙы табып билдәләргә.*

***Бал.***

Боронғо Грецияның атаҡлы математигы Пифагор балдың кеше ғүмерен оҙайтыуы тураһында яҙып сыҡҡан. Үҙе лә балды йыш ашаған һәм 90 йәшкә тиклем йәшәгән.

Шулай уҡ боронғо грек философы Демокрит та 100 йылдан артыҡ йәшәгән.Ул да балдың сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуын әйткән. Атаҡлы табип Әбуғалисина йәшлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән.

Юҡҡа ғына әйтелгән һүҙҙәр түгел былар.Балда 60-ҡа яҡын төрлө матдә бар. Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп. Ә улар-йөрәк мускулдарының нормаль эшләүе өсөн бик кәрәк матдәләр.

Бал витаминдарға ла бик бай. Уны һыуҙа иретеп,шуның менән ауыҙ сайҡайҙар. Һөҙөмтәлә күп кенә микробтар юҡҡа сыға.

Бал менән ашҡаҙан ауырыуҙарын да дауалайҙар. Йоҡлай алмағанда ла, балдың файҙалы булыуы билдәле.( 102 һүҙ)

*Өҫтәмә эш: Ике һөйләмдә баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға.*

***Ирәмәл һырттары.***

Яҙғы көндөң иртәнге йылы ҡояшы дымлы ер өҫтөнә күтәрелгән быуҙарҙан үтә төштө,уларҙы йәшелле-күкле ,юлаҡ-юлаҡ төрлө төҫтәге матур нурҙарға әйләндерҙе.

Шоңҡар ауылының тирә-яҡ тигеҙлегенән һөҙәкләнә барып,бейегәйеп киткән ҡырлас тауҙар унар саҡрымдарға һуҙылып алыҫаялар ҙа,Ирәмәлдең нәҙек һыҙыҡтар шикелле күренгән ҡаяларына барып тоташалар.Унан да уҙғас,Ирәмәл түбәһенең ҡайһы бер урындарында әллә ҡармы,әллә бейек тауҙың биттәрен һыйпап үткән болоттармы икәне лә айырылмай торған ҡайһылары аҡ,ҡайһылары ҡара нөктәләр генә күренәләр.

Аҡкондоҙ йылғаһының аръяғында сусаҡ тауҙың итәген ҡаплап үҫкән шыршы,ҡарағайҙар,йәшел ботаҡтарын ҡар һыуына мансып алған һымаҡ,тағы ла матур,тағы ла йәшелерәк булып асылғандар.Улар менән аралаш йәш ҡайын сауҡалары ла ваҡ ҡына бөрөп шытып килгән бөрөләренең морондарын яҙғы йылы елгә елберләтеп ултыралар.(106 һүҙ)(Һ.Дәүләтшина).

*Өҫтәмә эш: һуңғы абзацта һөйләм төрҙәрен билдәләргә.*

**Яҙма эш.**

1. Изложение яҙыу.”Ағиҙел менән Яйыҡ”.

**Мөмкинселектәре сикләнгән уҡыусыларға**
**контроль күсереп яҙыу өсөн текстар.**
***Октябрь.***

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Иртәнге һыуыҡтар көсәйә төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалҡынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Демо-версия МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала. Телмәрйендәр ҙә йоҡоға китә.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса ҡойолоп бөтә.

***Талкаҫ күле.***

Юлдаш менән Ҡыҙырас аяҡтарын күлдең йомшаҡ ҡомона батырып,оҙаҡ ултырҙылар.Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.Иртәнге һауала тауыш көслө яңғырай.Унда,Һаҡмар буйында,трактор геүләй.Һулда комбайн шаулай.Алыҫта йәштәрҙең йырлаған,көлгән тауыштары ишетелә.Оло юлдан иген,мәғдән тейәгән машиналар өҙлөкһөҙ үтә.Бейектә самолет күренә.Ул Өфөнән Баймаҡҡа почта килтерә.

Ә бында Талҡаҫ күле.Ул тып-тын ята.Күлдең уртаһында,күкһел томан эсендә,Уртаташ күренә.*(З.Биишеванан).*

***Коштарҙы ашатығыҙ.***

Урмандарҙа,баҡсаларҙа зарарлы бөжәктәрҙе таҙартыусы ҡоштар араһында ҡарабаш турғайҙан да егәрлеһе юҡтыр. Орнитологтарҙың иҫәпләүҙәренә ҡарағанда,бала үҫтергән саҡта ҡарабаш турғайҙарҙың бер ояһы ғына ла көн һайын меңләгән ҡаршылауыҡты юҡ итә.

Ҡыш етеп, көндәр һыуына башлағас, ҡарабаш турғай урмандан кеше йәшәгән тирәгә күсә.Бында аҙыҡ табыуы еңелерәк.

Ҡошсоҡ һалҡынға сыҙамлы. Уны аслыҡ ҡына һәләк итә. Ас булһа, өшөй ҙә,аҙыҡ эҙләргә хәле ҡалмай. Ҡайһы бер райондарҙа яҙ етеүгә уларҙың яртыһы ғына ҡалған була. Ә ҡыш бик һыуыҡ булһа,ундан бере генә ҡышлап сыға.

Балалар,ҡоштарға ярҙам итегеҙ! Улар-беҙҙең ярҙамсыларыбыҙ, дуҫтарыбыҙ. Уларҙы эйәләштерегеҙ, ашатығыҙ!(*И.Заянчковский*).

**Контроль эштәрҙе баһалау системаһы.**

- **Контроль диктантты** тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
- 1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
- 2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
- 3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
- 4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).* йә,йө, йү,йе ҡушымталарларының һәм дифтонгтарҙың яҙылышындағы хаталар.
- Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙы төркөмләү ҡаралған.
- Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
- 1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
- 2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
- 3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
- 4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
- Диктант бер генә билдә менән баһалана.
- **«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

Демо-версия МБОУ СОШ №1 с Чекмагуш

- **«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
- **«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
- **«2» билдәһе** 9 орфографик, 9 пунктуацион, йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
- Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
- **Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
- **«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
- **«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
- **«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,
- **«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

- Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау
- Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:
- -теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы айлай белеүе,
- -яҙғанда,грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла,изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла.Беренсе билдә менән уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

| **Баһаларҙың төп критерийҙары** | | |
|---|---|---|
| **Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө** | **Грамоталылыҡ** | **Баһалау** |
| 1. Яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,<br>2. Фактик хата булмаһа,<br>3. Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),<br>4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа,<br>5. Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u> Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 1 орфографик, йәки 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк,бөтәһе 1 генә хата) булһа, | **«5»** билдәһе ҡуйыла |
| 1.Эштең йөкмәткеһе, нигеҙҙә, темаға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),<br>2.Йөкмәтке, нигеҙҙә, дөрөҫ бирелһә,әммә эштә бик аҙ булһа ла, фактик хаталар осраЗа,<br>3.Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,<br>-Яҙма эш, нигеҙҙә,синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик | Яҙма эштә **2** орфографик һәм **2** пунктуацион хата, йәки **1** орфографик һәм **3** пунктуацион хата булһа, йәки бер орфографик хатаһы ла булмайынса, пунктуацион хаталары **4**-тән һәм грамматик хаталары **2**-нән артмаһа, | **«4»** билдәһе ҡуйыла |

Демо-версия МБОУ СОШ №1 с. Чекмагуш

| | | |
|---|---|---|
| формаларға бай булһа,<br>-Эш бер төрлө стилдә ябылыуы һәм тасуири булыу менән айырылып торһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u> Яҙма эштең телмәр хаталары өҫтөндә, йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа,уға «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | | |
| 1.Яҙма эштә теманы ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,<br>2.Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,<br>-айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,<br>-яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙе ҡулланыуға хаталар булһа,<br>-эш тема һәм уны аңлатыу (асыу)талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u>Яҙма эштәге телмәр хаталары 5-тән, йөкмәткелеге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә, эшкә **«3»** билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә **4** орфографик һәм **4** пунктуацион хата,йәки **3** орфографик һәм **5** пунктуацион хата, йәки **7** пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа, шулар өҫтөнә **4** грамматик хата ебәрелһә, | **«3»** билдәһе ҡуйыла |
| 1.Яҙма эш темаға тура килмәһә,<br>-фактик хаталар күп булһа,<br>-эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа,планға ярашһыҙ булһа,<br>1.Һүҙлегелеге ғәҙәттән тыш ярлы булһа,эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкцияны ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән торһа һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталар осраһа,<br>-эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u>Яҙма эштәге телмәр хаталары 7-нән, йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә лә, уға «2» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Орфографик хаталары **7**-нән,пунктуацион хаталары **7**-нән ,грамматик хаталар ҙа **7**-нән артһа, | **«2»** билдәһе ҡуйыла |

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш

Демо-версия. МБОУ СОШ №1 с.Чекмагуш